ОСКОН

Ноябрь, 2015 йыл Оскондан яҡҡын ҡабына



# Тәүге ҡар

Ноябрь. Көн һыуытып тора. Мин түҙемһеҙләнеп декабрҙе көтә башланым. Әҙерәк һыуыҡ ел исә. Моғайын, иртәгә ҡар яуыр, тип уйланым. Ысынлап та, иртәнсәк тороп хайран ҡалдым – тирә-яҡ ап-аҡ. Кисә генә ер ҡара ине бит. Тышҡа йүгереп сыҡтым. Һыуыҡ бер нисә тапҡыр битемде семеткеләп алды. Эй, рәхәт... Ләкин төшкөһөн ҡарҙы ҡояш иретә бит тип, ҡарҙы ҙур көрәк менән икенсе урынға өйә башланым. Ынйы бөртөктәре булып яуып торған ҡар бик матур ине. Өйгә инеп барғанда тамсылап торған боҙҙо күреп һындырып алдым да ялай башланым. Сығып Ҡыш бабай әүәләп йөрөгәндә ауырып китмәһәмме! Эй, йүткерәм, сәсәйем, тамағым ауырта. Хәлем бөткән кеүек булғас, өйгә инеп киттем. Әсәйем минең ауырыуымды аңлап, тәмһеҙ дарыуҙарын бирә башланы. Тик минең күңелем һаман тышҡа атлыға ине. Әсәйем эшкә китеү менән, арлы-бирле кейенеп, шәлемде муйынымдан ысҡындырып, тышҡа йүнәлдем. Әллә нисәмә Ҡыш бабай эшләнем. Ҡар ҙа туктаны. Мин тағы бер Ҡыш бабай эшләйем тиһәм, урамда ҡар бөткән. Сәғәткә ҡарап, әсәйемдең ҡайтыр ваҡыты етеүен аңлап, йүгереп өйгә инеп киттем. Муйыныма бәйләгән шәлемде таба алмағас, юрғанға уранып, йоҡлағанға һалышып яттым. Әсәйем сәй эсте, минең янында килмәй. Түҙмәй үҙем янына барып: "Әсәй, ниңә дарыу бирмәйһең?" – тинем. "Ана, тышта ун бер Ҡыш бабайың һине йүнәлтәм тип тәҙрәгә ҡарап ултыра",–тине ул.

Әлбиттә, әсәйем шаярта ине. Тик ул миңә бик асыуланған. Әсәйҙәр бит балалары өсөн борсола, ә беҙҙең ауырыуыбыҙ улар өсөн бигерәк тә көйөнөслө. Шуны ваҡытында аңламағанмын шул. Боҙ ялап, Ҡыш бабайҙар әүәләгәндән һуң оҙаҡ ҡына ауырып яттым. Эйе, ынйы бөртөктәре булып яуған ҡар матурлығы менән һәр кемде үҙенә тарта шул.

**Мостафина Вилена, 10- сы класс**

## Мәктәп яңылыҡтары







Әсәйҙәр көнө



# Яуығыҙ, карҙар, яуығыҙ!

Кистән яуа башлаған ҡар таң атыуға бөтә ерҙе ап – аҡ келәм менән ҡаплағайны. Көмөш бәҫ ҡунған ағастар әкиәт донъяһын хәтерләтә. Матур ҙа инде ҡышҡы тәбиғәт!

Күбәләктәй ҡар бөртөктәре леп –леп кенә осоп килеп төшәләр ҙә меңәрләгән аҡ йондоҙҙарға әйләнәләр. Ҡапыл башыма ҡыҙыҡ уй килде: сатлама һыуыҡтар, ҡарлы бурандар, ап – аҡ сихри донъя беҙҙе сыныҡтыра, үҙенсә һынай түгелме?

Һәр йыл һайын түҙемле, сабыр ҙа, йәш ҡарҙай саф күңелле лә булып ҡалайыҡ! Әйе, матур киләсәк хаҡында уйланайыҡ, хыялланайыҡ !

Йылҡыбаева Вилена, 11-се класс

«Каникул» һүҙе ҡайҙан килер сыҡҡан?

Бөтәбеҙгә лә билдәле булыуынса, каникул – ял осоро. Был һүҙ

Һәр уҡыусыла шатлыҡ тойғоһо уята. Ул этимологияһы буйынса латин һүҙе “канис”иан алынған.

Борон римляндар «Сириус» йондоҙон «Каникула» тип йөрөткәндәр. Ул – күк йөҙөндә балҡып яныусы иң сағыу йондоҙ. Айырыусы ул июль айында яҡты нурҙар сәсә, ошо ваҡыт Римда йәйге эҫе көндәр башлана һәм уҡыуҙар туҡталып торған. «Каникул» һүҙе ошо йондоҙ атамаһынан килеп сыҡҡан.

***Нуриева Альбина,8-се класс***

# Минең шәжәрәм!!!

Шәжәрә-ул сал тарихҡа бағыр тәҙрә,
Күҙ яҙҙырһаң,шул тәғрәнән атыр йәҙрә.
Ал бер үрнәк-бал ҡорттары төҙөй кәрәҙ,
Һин дә ятма:ҡор ояңды.үр шәжәрә!..

Ҡәҙим Аралбаев

Шәжәрә-ғәрәп һүҙе, ул ырыу ағасы тигәнде аңлата. Борн-борондан туған-кәрҙәшлек ептәрен ағас олоно һәм уның ботаҡтары, япраҡтары формаһында күрәһәткәндәр. Башҡорт шәжәрәһендә тик ирҙәр исеме генә алынған, ә ҡыҙ исемдәре яҙылған осраҡта ла ул таралып китә алмаған. Йола буйынса башҡорттар үҙ нәҫелдәрен ете буынға тиклем белергә тейеш булған. Шәжәрәне тик ырыу ағасы тип кенә ҡарарға ярамай,сөнки бик күп шәжәрәләрҙе илебеҙҙең тарихы ла сығылып ҡала.Ул мөһим ваҡиғаларҙы яҙып барған йылъяҙма. Мәҫәлән,башҡорттарҙың Рус дәүләте составына инергә саҡырыуҙарын Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Тамъян ырыуҙары шәжәрәләрендә лә уҡырға мөмкин. Күп кенә шәжәрәнең рәсми документ булараҡ ҙур мәғәнәгә эйә булыу ла билдәле. Бынан 450 йыл элек Рус дәүләтенә ҡушылыу өсөн мендәр ырыуынан ла 4 илсе барған. Улар араһында тамырҙары беҙҙең яҡтарға килеп тоташҡан Кәнзәфәр бей ҙа булған. Шәжәрәлә тормош-көнкүреште ,фольклорҙы ла күрергә була. Мәҫәлән, Үҫергән ырыуы шәжәрәһе шиғри формала һаҡланып ҡалған.

Тәүге шәжәрәләр 12-13 быуаттарҙы төҙөлгән. Был турала беҙ легендаларҙа уҡып беләбеҙ. Мәҫәлән, «Бәрей ырыуы» легендаһы шәжәрә формаһында башланып китә.

Иң боронғо шәжәрәләр беҙҙең көнгә тиклем етмәгән. Элек улар халыҡ ижады кеүек телдән-телгә һөйләнә килгән. Иң беренсе яҙылған шәжәрә Юрматы ырыуыныҡы. Шәжәрәләр ғәрәп хәрәфтәрә менән әҙәби төрки телендә яҙылған.

***Мөхәмәтшина Эльвина, 6– сы класс***



**Ҡоролтайға әйтер һүҙем бар**

Матурлыҡты һөйгән кешеләр
бөйөклөктө ныға беләләр-

тип шағир, яҙыусы, драматург, үҙ иленең ысын патриоты Дауыт Юлтый бик дөрөҫ әйткән. Уның һүҙҙәре менән мин тулыһынса килешәм. Сабый баланан алып күренекле шәхестәргә тиклем кеше матурлыҡты тойорға, күрергә, уға ынтылырға тейеш. Минең уйымса, тормоштоң, бөтә ғаләмдең тышҡы матурлығын ғына түгел, ә эске матурлығын да һиҙеп һоҡланырға өйрәнергә кәрәк.

Эске матурлыҡты һәр шәхес үҙе тыуҙыра. Был һәр кемдең бурысы ла, тип уйлайым мин. Сөнки матурлыҡҡа ынтылған кешелнең күңеле яҡты, уйҙары саф. Ул - бөйөк кеше. “Матурлыҡ донъяны ҡотҡарыр”, - тип фәлсәүефтәрҙең әйткә

һүҙенә тағы бер тапҡыр ышанам.

Мин быйылғы йылда ун беренсе кластарҙы тамамлап, тормош тигән оло һуҡмаҡҡа аяҡ баҫырға торам. Алдымда бик күп һорауҙар, проблемалар. Күп һөнәрҙәр араһынан минең күңелемә дизайнер һөнәре бик яҡын. Киләсәктә тыуған ҡалам-Өфөмдөң урамдарын, туҡталыштарын биҙәү хыялы миндә йәшәй. Ҡазахстан, Үзбәкстан, Татарстан республикаларының баш ҡалалары менән сағыштырғанда, беҙҙең Өфөлә милли үҙенсәлек, милли колорит етешмәй. Шунлыҡтан, дәүләт телебеҙ башҡорт теленә, туған халҡыма ҡарата мөнәсәбәт тә түбәнерәк кимәлдә, тип уйлайым мин. Мәҫәлән, Өфөбеҙҙең үҙәк урамдары: Цурюпа, Карл Маркс, Конституция йәки Октябрь проспектына күҙ һалайыҡ. Был урамдар сит илдәр урамдарын хәтерләтә. Сөнки, беренсенән, был урамдарҙа урынлашҡан төрлө объекттар сит ил атамалары менән исемләнгән. Мәҫәлән, сауҙа үҙәктәренә иғтибар итәйек. Яҙыуҙарҙың күбеһе инглиз телендә яҙылған: Adidas, Castorama, Diva, Finn Flare һәм башҡалар. Уларҙан кафе, ҡунаҡханалар ҙа ҡалышмай: Hampton by Hilton, Holiday Inn. Был урамдарҙа йөрөгәндә, үҙемде сит илдә йөрөгән кеүек һиҙәм. Ошо атамаларҙы көн дә уҡып йөрөгән уҡыусылар, студенттар, йәштәр күңелендә сит илдәрҙә йәшәү тойғоһо нығыраҡ тамыр йәйәлер, тигән ышаныста мин. Урта мәктәпте тамамлаған сығарылыш уҡыусыларының сит илдәрҙе, сит өлкәләрҙе һайлауға был төп этәргес булып тора. Әгәр ҙә Өфөбеҙҙә Республикабыҙға исем биргән, бай тарихлы, ғорур халҡымдың күренекле шәхестәре, батырҙары, башҡорт халыҡ ижады образдарының исемдәре менән исемләһәк, милли биҙәктәр, төҫтәрҙе йышыраҡ ҡулланһаҡ, һәр кешенең күңелендә тыуған ергә, тыуған илгә, туған халҡыбыҙға, туған телебеҙ- башҡорт теленә ҡарата ыңғай йылы ҡараш тыуҙырыр инек.

Тыуған ерҙе ярат. Ул бит һинең
Йәшәү һуты биргән төйәгең.
Тыуған телде һаҡла. Үлгәндә лә

Үҙ ереңдә ятһын һөйәгең.

***Нуриева Альбина, 11-се класс***

Баш мөхәррир: Ильясова Г.М. Компьютер верстканы: Стрижова И.М.
Мөхәрриәт: 5-11 класс уҡыусылары.